# Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың графомотор күнекмәләрен үҫтереү

**Ураҙбаева Айгөл Фәтих ҡыҙы, Сибай ҡалаһы Бала үҫтереү үҙәге “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһының уҡытыусы-логопеды**

6 – 7 йәшлек баланың ваҡ моторикаһы үҫеше кимәле уның мәктәпкә интеллектуаль әҙерлек күрһәткесенең береһе булып тора.

Яҙыуға өйрәтеү – мәктәптең бурысы. Әммә күп кенә кәрәкле күнекмәләрҙе бала мәктәпкә барғансы, уның алдына яҙырға өйрәнеү бурысы килеп торғансы үҙләштерә ала. Шул ваҡытта яҙырға өйрәтеү һиҙелерлек еңелләшә. Яҙыу – ҡулдарҙың ваҡ координациялы хәрәкәттәрен башҡарыуҙы үҙ эсенә алған ауыр күнекмә. Яҙыу техникаһы ҡул суҡтарының ваҡ мускулдарының һәм бөтә ҡулдың үҙ ара килешеп эшләүен талап итә, шулай уҡ күреп ҡабул итеүҙең һәм ирекле иғтибарҙың яҡшы үҫешен талап итә. Яҙыу күнекмәһен үҙләштереү өсөн баш мейеһе ҡабығының билдәле өлөшөнөң өлгөргәнлеге кәрәк.

Шулай итеп, мәктәпкәсә йәштә яҙыуға өйрәнеүгә кәрәкле механизмдарҙы үҫтерергә кәрәк, баланың хәрәкәт тәжрибәһен туплауға, ҡул оҫталығын үҫтереүгә шарттар булдырырға кәрәк.

Психологтар һәм физиологтар иҫәбе буйынса, 6 – 7 йәшлек балаларҙың ҡулдарының ваҡ мускулдары насар үҫешкән, бармаҡ суҡтарының һөйәктәре формалашып етмәгән. Хәрәкәтте контрольдә тотоусы нерв күҙәнәктәре үҫешеп етмәгән, шуға ла хәрәкәттәр теүәл һәм етеҙ килеп сыҡмай, сигнал баш мейеһенә оҙағыраҡ барып етә. Хәрәкәттәр эшләгәндә был йәштә төп контроль күреүгә бәйләнгән, хатта хәрәкәт эшләгәндә эшмәкәрлек урынын ғына ҡарамай, ә башынан аҙағына тиклем бөтә хәрәкәт күҙ алдынан үтә. Шуға күрә М.М. Безруких әйтеүенсә, балалар ҙур ҡыйынлыҡ менән хәрефтәрҙе яҙалар, һүрәттәрҙе күсереп эшләйҙәр, уларға бер нисә параллель

һыҙыҡты һыҙыуы ла ҡыйын, хәрефтең ҙурлығын ҡарап билдәләү ауыр. Уларға тар юлда яҙыуға ҡарағанда ҙур хәрефтәрҙе яҙыу, ҙур фигуралар төшөрөү еңелерәк. Хәрефтәрҙе һәм уларҙың элементтарын ҡабул итеү һәм яҙыуҙа ҡатнашҡан күреү һәм хәрәкәт анализаторҙары төрлө үҫеш стадияһында торалар.

4 йәштән 7 йәшкә тиклемге осор балаларҙың графомотор күнекмәләренең һәм ҡул оҫталығы үҫеше өсөн иң уңайлы осор, сөнки мускул хәтере был осорҙа үҙенә һеңдереүсән.

Графомотор күнекмә – ул яҙған ҡулдың билдәле торошо һәм хәрәкәттәре. Был күнекмә ярҙам итә:

- һүрәт төшөрөргә;
- буярға;
- ябай биҙәктәрҙе күсереп эшләргә;
- нөктәләрҙе тоташтырырға;
- ручканы, ҡәләмде дөрөҫ тоторға.

Әйткәндәй, иң тәү сиратта баланың ҡайһы ҡулы алып барыусы ҡул булыуын асыҡларға кәрәк – уң ҡулмы, һул ҡулмы? Һул ҡул менән яҙған баланы уң ҡул менә яҙыуын талап итергә ярамай, ти психологтар.

Мәктәпкәсә йәштәге баланың графомотор күнекмәләренең дөрөҫ формалашыуы уға мәктәп программаһын уңышлы үҙләштерергә ярҙам итә.

Графомотор күнекмәләр үҙ эсенә алалар:

- Бармаҡтарҙың ваҡ мускулатураһын (бармаҡтарҙың көсөн һәм хәрәкәттәренең тиҙлеген контрольдә тотоу)
- Күреү анализ һәм синтезы (тән өлөштәренең уң һәм һул өлөштәрен билдәләү; предметтарға ҡарата арауыҡта йүнәлеш ала белеү; кәрәкле йүнәлештәрҙе һайлау шарты менән заданиеларҙы эшләү).
- Һүрәт төшөрөү (штрихлау, контур буйынса йөрөтөү, уратыу; геометрик фигураларҙы ҡарап эшләү; предметтарҙы, уларҙың детальдәрен эшләү; эшләп бөтөлмәгән һүрәттәрҙе эшләп бөтөрөү; һүрәттең етмәгән детальдәрен эшләп бөтөрөү)

- График символдар (биҙәктәр эшләү, шулай уҡ уларҙы символдар ярҙамында эшләү һәләте)

Графомотор күнекмәләҙе үҫтереү этаптары:

**1 –се этап.  Эре һәм ваҡ моториканы үҫтереү**

Ҡул бармаҡтарының ваҡ моторикаһын үҫтереү баш мейеһе ҡабығының эшмәкәрлеген көсәйтеүсе  һәм баланың телмәр үҫешенә булышлыҡ итеүсе көслө сара булып тора.

**Ваҡ моториканы үҫтереү өсөн кәрәк:**

- Бармаҡ гимнастикаһы  эшләү, шулай уҡ массаж (үҙ-үҙенә массаж эшләү, Су-Джок шарҙары менән массаж);
- Пластилиндан йәки балсыҡтан әүәләү;
- Ҡағыҙҙарҙы ҡырҡыу;
- Муйынсаҡтарҙы, төймәләрҙе епкә теҙеү һ.б.;
- Төймәләрҙе, ҡаптырмаларҙы элеү, сисеү;
- Мозаикалар, конструкторҙар йыйыу;
- Төҫһөҙ һүрәттәрҙе буяу;
- Үтә күренмәле ҡағыҙға һүрәттәрҙе күсереп эшләү һ.б.

**2 – се этап.**

Арауыҡ төшөнсәләрен һәм арауыҡ мөнәсәбәттәрен телмәр ярҙамында билдәләүҙе формалаштырыу.

**Был этап шуны күҙ уңында тота:**

- үҙенең тәнендә ориентир тотоу;
- тирә-йүндә ориентир тотоу;
- ҡағыҙ битендә ориентир тотоу.

**3 – сө этап.**

**Күреү гнозисын (грек. познавание, знание)үҫтереү:**

- предметтарҙың контурлы һүрәттәре;
- һыҙылған контурлы һүрәттәр;
- бер-береһенә һалынған контурлы һүрәттәр һ.б.

Форма, төҫ, ҙурлыҡ тураһында төшөнсәләрҙе асыҡлау.

Күреү хәтеренең күләмен асыҡлау һәм киңәйтеү.

- күреү анализ һәм синтезын үҫтереү.

**4 – се этап.**

- Дәфтәр һәм юл менән таныштырыу.
- Вертикаль һәм горизонталь һыҙыҡтар, улар менән комбинациялар эшләү.
- Ауыш тура һыҙыҡтар һәм улар менән комбинациялар эшләү.
- Орнаменттар, дуғалар, тулҡынлы һыҙыҡтар, түңәрәктәр, овалдар һ.б.эшләү.
- Шаҡмаҡтар буйлап ҡатмарлы формалы предметтәрҙы эшләү (математик диктанттар).
- График символиканы үҙләштереү.
- Хәрефтәрҙең график образдарын формалаштырыу буйынса эш.
- Оҡшаш хәрефтәрҙе дифференциациялау.

Графомотор күнекмәләрҙе формалаштырыуға булышлыҡ итеүсе ваҡ моториканы һәм күреү-мотор координацияһын үҫтереүҙең йәш үҙенсәлектәре

**2 йәштән 3 йәшкә тиклем**

- бала йәшникте (ҡумтаны) аса;
- ҡом, ярмалар,ҡамыр һәм балсыҡ менән уйнай;
- ҡапҡастарҙы аса, яба, бора;
- бармаҡтар менән һүрәт төшөрә;
- муйынсаҡтарҙы теҙә;
- ҡәләмде дөрөҫ тота;
- формаларҙы бер нисә һыҙыҡ менән күсереп эшләй;
- кубиктарҙан ҡоролмалар төҙөй.

**Иртә йәштәге кескәйҙәр төркөмө**

Уйын ситуацияһында үҙ аллы хәрәкәт әүҙемлеген стимуллаштырыу.

Шиғыр теksына ярашлы хәрәкәттәрҙе яраҡлаштырыу һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Ваҡ һәм дөйөм моториканы үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

Ваҡ моториканы үҫтереү бармаҡ уйындары, бармаҡ гимнастикаһы, шиғырҙар менән оҙатылып барған бармаҡтарға күнегеүҙәр аша башҡарыла. Бармаҡ хәрәкәттәрен үҫтереү һәм формалаштырыу өсөн ошондай күнегеүҙәрҙе ҡулланырға була:

“Бармаҡтар һаулыҡ һорашалар”

“Ҡайсы”

“Ҡояш - болот”

“Футбол”

“Бармаҡтар йәбешкәндәр”

“Йоҙроҡ – ҡабырға - ус”

“Баҫҡыс” һ.б.

**Кескәйҙәр төркөмө**

Оҫталыҡ формалаштырыу:

- горизонталь һәм вертикаль һыҙыҡтар төшөрөү;
- түңәрәк һыҙыҡтар төшөрөү;
- предметтарҙың контурын буяу.

**Уртансылар төркөмө**

Ябай график күнегеүҙәрҙән ҡатмарлыраҡтарға күсеү.

- горизонталь һәм вертикаль һыҙыҡтар төшөрөү, һуңынан түңәрәк һыҙыҡтар төшөрөү, аҙаҡтан бер нисә элемент ҡушылған предметтарҙы төшөрөү.
- штрихлау.
- ҡул бармаҡтарының ирекле хәрәкәттәре (ваҡ моторика) физкультминуттар ваҡытында үҫешә.

**Өлкәндәр төркөмө**

- горизонталь һәм вертикаль һыҙыҡтар төшөрөүҙе дауам итеү;
- түңәрәк һыҙыҡтар төшөрөү;

- тура һәм түңәрәк һыҙыҡтар ҡушылған предметтарҙы төшөрөү;
- төрлө предметтарҙы штрихлау;
- алфавит хәрефтәрен, цифрҙарҙы яҙыу(хәрефтәрҙе, цифрҙарҙы яҙғанда өлгө бирергә кәрәк)

Шуны онотмағыҙ, бала башҡа кешенең эшләгәнен ҡарап торғанда, күҙәткәндә нимәгәлер тиҙерәк өйрәнә. Баланың күҙ алдында яҙыу, һүрәт төшөрөү, башҡа күнегеүҙәр эшләү графомотор күнекмәләрҙе үҫтереүгә булышлыҡ итә, өйрәтеү процесын еңеләйтә.

**Мәктәпкә әҙерлек төркөмө**

Яҙыуға әҙерлек эше тамамлана.

- Буй һыҙыҡлы дәфтәр менән таныштырыу, “киң һәм тар юл” төшөнсәһе менән таныштырыу, унда ориентир тотоу һәләтен үҫтереү.
- Сикләнгән арауыҡта (киң һәм тар юлда) тура һәм тоташтырылған һыҙыҡтар һыҙыу һәләтен үҫтереү.
- Контурҙан сыҡмайынса предметтарҙы штрихлау.
- Шаҡмаҡ дәфтәрҙә анализ һәм синтез эшләүҙе талап иткән предметтарҙың һүрәттәрен эшләү.
- Баҫма хәрефтәр менән һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу.
- Бөтә эштәр ҙә күҙ самаһын үҫтереүгә, ҡулдың теүәл координацияһына йүнәлдерелгән һәм дәрестең темаһына бәйләнгән.

Шулай итеп, педагогтарҙың маҡсаты былып төрлө ысулдар һәм алымдар ярҙамында мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың графомотор күнекмәләрен үҫтереү, хәрәкәт тәжрибәһен туплау өсөн, тәү сиратта ҡул оҫталығын үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырыу тора.